*Клара ХӘМИҘУЛЛИНА*

# Башҡорт эпостарында Инжил һәм Ҡөрьән-Кәрим мотивтары

Һүҙҙе “Иҙеүкәй һәм Мораҙым” эпосынан башлап китәйек. Унда өс аҡыл эйәһе тураһында хәбәр бирелә. Уларҙың береһе исемһеҙ ҡарт, икенсеһе — Һабрау ҡарт, ә инде өсөнсөһө — әүлиә Төкләҫ баба. Аҡыл эйәләренең үҙ-ара мөнәсәбәттәре исемһеҙ ҡарт телмәре менән бирелә: “Һабрау менән икәүләп Төкләҫкә юлдаш булдыҡ беҙ, күп саҡтарҙа өсәүләп бергә серҙәш булдыҡ беҙ”, — ти ул. Шул уҡ ваҡытта был исемһеҙ ҡарт: “Төкләҫ менән икәүләп Ҡәғбәлә лә булдыҡ беҙ, илгә килгән ғәүергә бергә һаҙаҡ юндыҡ беҙ”, — тип тә белдерә. Был хәбәр алда һөйләнәсәк һүҙҙе аңларға ярҙам итәсәк. Төкләҫ баба уланы Иҙеүкәй Уралдан Сытмыр ханға эт — күк бурҙай эйәртеп бара. Уның этенә булған мөнәсәбәте бик матур бирелә: “Иҙеүкәй эткә ҡараған, арҡаһынан ятраҡан, юлды һайла, тигәндәй, эт башынан һыйпаған”. Юл ыңғайында күп нәмәләр осрай Иҙеүкәйгә, хатта ул эйәрткән эт тә хикмәтле булып сыға — сюжет барышында бурҙайҙың исемһеҙ ҡарттың эткә әүерелгән улы булыуы асыҡлана. Иҙеүҙең исемһеҙ ҡартҡа барып юлығыуы ла хикмәтле: күк бурҙайы уны өс юл сатына алып китә лә: “...Бер мәмерйә алдына эте барып туҡтаған. Иҙеүкәй ҡарап тормайса, баҫмалатып ҡалмайса, һис бер ниҙән ҡурҡмай, ингән эте артынан”. Мәмерйәлә Иҙеүкәй Төкләҫ тарафынан махсус бикләнгән һайыҫҡан ҡошто тотоп ала. Тылсымлы ат ҡылы ярҙамында телгә килгән һайыҫҡан: “Егет, ебәр һин мине, мин ярармын бер һиңә, юғалғаның эҙләһәң, табышырмын мин һиңә”, — тип һүҙ бирә. Аҙаҡтан ул Иҙеүкәйгә Урал батыр торҡаһын табып килтерә.

Мәмерйәлә сер һандығын һаҡлаған телһеҙ-ҡолаҡһыҙ, исемһеҙ ҡартты ла эт менән Иҙеү әлеге тылсымлы ҡыл ярҙамында телгә килтерәләр һәм исемһеҙ ҡарт: “...Мыш-мыш килеп илаған, һау килдеңме, балам, тиеп, этте һөйөп һаулашҡан. Иҙеүкәй, күреп был хәлде, ҡарттан төпсөп һорашҡан”. Ошо төпсөнөүгә яуап итеп исемһеҙ ҡарттың һөйләгәндәре бермә-бер Ҡөрьән-Кәрим мотивтары менән тура килә. Сағыштырабыҙ. Иртәктә: “Баба Төкләҫ әүлиә Алла менән серләште. Уралда тыуған бер батыр ил һаҡларҙай булмаѓас, Урал батыр ҡылысын тотор батыр тыумағас, ҡайҙа ятҡан урынын һис берәүгә әйтмәне. Урал күҙен соҡоған һайыҫҡанды тотто ла мәмерйәгә бикләне. Мине ерҙең аҫтына сер һаҡларға ултыртты. Мин буйһондом Төкләҫкә. Шул көндән үк ул мине телһеҙ-ҡолаҡһыҙ итеп, серле һандығын биреп, ошо ташҡа ултыртып, әйләндерҙе байғошҡа. Бер ҡатыным бар ине, уны айыртып тол ҡылды. Яңғыҙ балам бар ине, бына ошо юлдашың — үлмәй торған эт ҡылды”.

Ҡөрьән-Кәримдә “Мәмерйә” сүрәһенең аяттары был мотивтарға ауаздаш:

9. Әллә һин (Мөхәммәт с.ғ.с) Мәмерйә эйәләрен һәм Әр Рәҡимде беҙҙең аяттарыбыҙ араһында ғәжәйеп нәмә булғандыр, тип иҫәпләйһеңме?

10. Бына егеттәр мәмерйәлә йәшеренде һәм, Раббыбыҙ, беҙгә үҙ тарафыңдан рәхмәт бир һәм беҙҙең эшебеҙҙә туралыҡ булыр, — тип әйттеләр.

11. Һәм беҙ уларҙың ҡолаҡтарын мәмерйәлә күп йылдар томалап ҡуйҙыҡ. (Ф.Баишев, Д.Мәһәҙиев тәржемәһе,1992 йыл, Ҡөрьән-Кәрим. Өфө.)

Егеттәр араһында эт булғаны ла хәбәрләнә:

18. Һәм һин уларҙы уяуҙар тип уйлайһың, ә улар йоҡлай, һәм Беҙ уларҙы уңға ла, һулға ла әйләндерәбеҙ, ә уларҙың эттәре тәпәйҙәрен алға һуҙған (шул уҡ тәржемә).

Эпос сюжетына ярашлы, Аллаһ Тәғәлә менән серләшә белгән Төкләç баба үҙе һәм ҡулдаштары белгән бөтә серҙе билдәле бер ваҡытҡа тиклем мәмерйәгә йәшереү сараһын күргән булып сыға. Өс быуын әүлиәләр тоҡомо Төкләç баба башҡорт шәжәрәләрендә Сәсле (Чачлы, Сачлы) дәрүиш шәкелендә бирелә. Русса версияла Чюлька-Ата, Чечюлька-Ата шәкеле лә бар. Ошо тарафта башҡорт шәжәрәләрендә бер нәмә иғтибарҙы йәлеп итә: “Чечюлька-Ата”ның ҡәбере асылған булыуы бәйән ителә һәм, “...когда осмотрели могилу, увидели, что она выложена кирпичом. И вот что удивительно: черноволосый, красно-щекий молодой человек лежит в ней как живой. Хан сказал, очевидно, это и есть их святой”. Кәүҙәһе бөтөн килеш һаҡланған Төкләç баба үҙе ле мәмерйә эйәһе булыуы мөмкин, Ҡөрьәндә лә бит бер кеше тураһында ғына әйтелмәй, ә “егеттәр” тип әйтелә.

Исемһеҙ ҡарт терелгәс, үҙе һаҡлаған сер һандығын Иҙеүкәйгә тапшыра һәм уға бик мөһим сер төйөнө асыла. Һандыҡтағы китапта Иҙеүкәйҙең шәжәрәһе менән бергә Урал батырҙан таралған тоҡомдарҙың йәшәйеше лә күрһәтелгән була. Цитата: “Уралдағы барлыҡ йән кешене түгел, эт һөйгән тоҡомомдан берәүһе ошо китапҡа юлығыр”. Эт йорт хайуаны булараҡ, ҡулға эйәләштерелгән бүре икәнен белһәк, был “эт һөйгән ҡәүем” — бүре йәнле ҡәүем икәне аңлашыла. “Бала һөйгән — бала йәнле, ата һөйгән — ата йәнле”, — ти халыҡ әйтеме. Юлында осраған хикмәтле күк бурҙайҙы үҙенә юлдаш итеп алған Иҙеүкәй ҙә ошо ҡәүемдән булып сыға, тимәк. Иҙеүкәй иленең үҙе ерләнгән тарафында Бөрйән (Бүрейән) исеме менән 1834 йылда ике ауыл теркәлгән. Рус телендә: Бурзян-Ильчигулова, Бурзян-Кангулова. Был ауылдар бөгөнгө Миәкә районында.

Шул уҡ ваҡытта бүрененң ышаныслы юлдаш булыуы башҡорт шәжәрәләрендә лә билдәләнә. Өҙөк: “Три сподвижника Пророка оставались в Булгаре десять лет. Потом Габдуррахман с Забиром вдвоем ушли в Медину, а Хантыл остался... Но однажды он очень заскучал по пророку нашему Мухаммаду и ушел в Озаренную Медину. Когда Хантыл пробыл три месяца перед лицом Посланника Аллаха, он захотел вновь вернуться. Хантыл сказал: “Как же я доберусь обратно?” Пророк, да пребудет мир над ним, благословил его и сказал: “О, Хантыл! Выйди из сей Медины наружу, проводником тебе да будет волк!” И только он подошел, волк, говорят, тронулся в путь... И как только они достигли своего города, волк исчез с глаз Хантыла. От Хантыла, сына Рабига родился Саид хан...” (Башкирские родословные. 2002 г. Уфа).

Әгәр Башҡорт иленә килгән сәхәбәләрҙең заманы Пәйғәмбәребеҙ с.ғ.с. Мәҙинәлә йәшәгән ваҡытҡа тура килә икән, был 622—633 йылдар эсендә булып үткән хәлдәр. Шәжәрәләге өҫтә килтерелгән мәғлүмәт Салауат Хәмиҙуллиндың фаразын ҡеүәтләй: “Ислам на территорию современного Башкортостана стал проникать в эпоху Хазарского каганата (VII—X вв). Одним из путей проникно-вения ислама на Южный Урал был водный путь “из хазар в башкиры”, т.е. по

акватории Каспия, по реке Яик в Башкирию. Этот маршрут был гораздо более коротким и более удобным, чем Волжский путь" ("Ватандаш", №12, 2013 г.).

Ислам диненә тәүләп ылығып киткән Көньяҡ Урал ҡәүемдәренән Мең башҡорттары булған. Ун бер Мең тармағының бишеһе — Сыу бүлеге, шәжәрәләрҙә рус телендә Чублек тип бирелә, рәсми документтарҙа Су-би, Чу-би (сыбыйҙар). Шуларҙың береһе — Яйыҡ сыбыйҙар. Унан ҡала, Каспий (Хазар) диңгеҙенең көнсығыш ярында Мангышлак ярымутрауы исеменең мәғәнәһе — Мең ҡышлағы. Сыбый ҡәүеменең исеменән үк күренеп тороуынса, был һыу юлдарын, һыу буйҙарын яҡшы белгән ҡәүемдәр булған, тип раҫларға нигеҙ бар. "Иҙеүкәй һәм Мораҙым" иртәгендә килтерелгән исемһеҙ ҡарт улының эткә әүерелеүе Ҡөрьән-Кәримдә килтерелгән оҡшаш эстәлекле хикәйәттәргә ишара булып тора. Ҡөрьәндә Аллаһты инҡар итеп сиктән аҙған ҡәүемдәрҙең бер осраҡта сусҡалар өйөрөнә, икенсе осраҡта маймылдарға әйләндерелеүе бәйәнләнә һәм был әхүәлдәр Аллаһ Тәғәләнең язаһы булһа, исемһеҙ ҡарт улының эт рәүешен алыуы Аллаһ Тәғәләнең Әҙәм затын мәңге үлмәҫ, мәңге тоғро юлдаш, ярҙамсы менән нығытыуы булып төҫмөрләнә. Шуға ла Уралда "барлыҡ йән кешене түгел, эт һөйгән" тоҡомдар булған. "Эт һөйгән" тоҡомдар тураһында өҫтә һүҙ булды, ә бына "кешене түгел" тигән йөмлә дәрүишлектә (кешеләрҙән ситтә) йөрөгән заттар тураһында булыуы ихтимал.

Ҡөрьән-Кәримдең өҫтә килтерелгән "Мәмерйә" сүрәһе аяттарына кире ҡайтып, "Әллә һин мәмерйә эйәләрен һәм Әр Рәҡимды беҙҙең аяттарыбыҙ араһында ғәжәйеп нәмә булғандыр, тип иҫәпләйһеңме?" тигән аят күп фекерҙәр тыуҙыра. Әлбиттә, тере кешене йоҡлатып (үлтереп), йоҡлаған (үлгән) егеттәрҙе терелтеү әҙәм заты өсөн аңлап булмаҫлыҡ тылсым кеүек тойолһа ла, Аллаһ Тәғәлә өсөн был ғәжәйеп эш түгел, ә мәңге бөтмәҫ яралтыу әхүәле, халыҡтың, беҙҙең осраҡта Урал батырҙың генофондын һаҡлау эше, тип фаразларға була. "Урал батыр" эпосының беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып килеүенең сәсәнлектән башҡа ла үҙ сере барҙыр. Урал батыр тураһында хикәйәт белгән бер тере кеше ошо ысул менән һаҡланып, йәнә терелтелергә лә мөмкин — Аллаһу Тәғәләнең сикһеҙ ҡөҙрәте быға шикһеҙ дәлил була ала. Мифология хикмәте менән Батыр фиғелен алған был ир затының үҙ заманында пәйғәмбәрлек сифаттарын йөрөтөүе күренеп тә тора кеүек.

"Һәр бер өммәткә үҙ рәсүле — һәм рәсүл килгәс, улар араһындағы эш ғәҙеллек менән хәл ителгән булыр һәм улар йәберләнмәҫ тә". Ҡөрьән-Кәрим. 10-сы сүрә, 47-се аят.

"Һәм беҙ рәсүлдәрҙе үҙ халыҡтарының теле менән генә уларға аңлатһындар өсөн ебәрҙек. Алла теләгәнен юлдан яҙҙыра һәм теләгәнен тура юлдан алып бара. Ул — бөйөк, хикмәтле!" Ҡөрьән-Кәрим. 14-се сүрә, 4-се аят.

Аллаһу Сөбхәнә үә Тәғәләнең туранан-тура телмәренән — Ҡөрьән- Кәримдән күренеүенсә, беҙҙең өммәткә лә пәйғәмбәр тәғәйен булған, тимәк. Бында шикләнеп, икеләнеп торорға урын юҡ. Ошо логиканы дауам итеп, Ҡөрьәндән йәнә аяттар:

"Һиңә ҡәҙәр индерелгәндәрҙе раҫлап, Ул һиңә Китап индерҙе, һәм Әт Тәүратты һәм Әл Инжилде индерҙе". 3-сө сүрә, 3-сө аят.

"Һәм элек кешеләргә ҡулланма итеп Әл Форҡанды индерҙе". 3-сө сүрә, 4-се аят.

"Форҡан" һүҙен беҙҙең заман кешеләре "Ҡөрьән" һүҙенә тиң мәғәнәлә ҡуллана. Ҡалыплау ғәмәленең сағылышы был. Ләкин Ҡөрьән-Кәрим бераү һәм Аллаһ Тәғәлә уны үҙенең һайлап алынған Мостафа рәсүленә элек төшөрөлгәндәрҙе раҫлар өсөн дә төшөргән, быға күп аяттар дәлил.

“Әл Форҡан” төшөнсәһенең нигеҙендә — айырыу, айыра белеү, төшөнә белеү зарурлығы. Айыра белеү тигәндә, Валерия Порохова ошондай тәфсир бирә: “Фуркан — Различение. Различение обычно относится к тем Божественным откровениям и к той части Святого Писания, в которых имеются указания на дозволенное и недозволенное” (В.Порохова. Коран. Перевод смыслов и комментарии. стр.666).

“Урал Батыр” эпосын Әл Форҡан рәтенә индереп була, унда яҡшылыҡ — яуызлыҡ, тыйыу — тыйылыу талаптары ярылып ята, ә инде ниндәй юлды айырып һайлау һәр ирекле заттың үҙ ихтыярында. Әгәр “Форҡан” төшөнсәһе ошондай ҙур фәлсәфәүи мәғәнә йөрөткәс, ул кешелек донъяһы менән бергә тыуған һәм уның талаптары тәүкешене һуғарып, уны хайуани халәттән айырып, Әҙәми зат иткән бөйөк төшөнсә. Аллаһ Тәғәлә һәр бер халыҡҡа үҙ телендә һөйләшкән рәсүлдәрҙе ебәргән икән, уларға, әлбиттә, әл Форҡан ғәләмәте бирелгән булған. Яҡшы менән яманды айыра белергә, ғәҙеллек хикмәтен алға һөрөп, тыйылғандан тыйыла белергә өйрәтһендәр өсөн.

Урал иһә башҡорт халҡының тарихи хәтерендә батыр булып урынлашҡан, әммә был һүҙҙең тәүтөшөнсәһе “пәйғәмбәр” төшөнсәһенә бәрәбәр булғандыр. Изге китаптарҙан күренеүенсә, һәр бер пәйғәмбәр үҙенең изге бурысын үтәп, тамамлап донъя ҡуйған. Ошо уҡ миссия Урал батыр тарафынан да башҡарыла һәм уның үҙ телмәре менән әйтелә: “Диңгеҙҙе дейеүҙән әрсеп, ерҙә торлаҡ табыштым. Кешеләрҙе яуыздан ҡотҡарырға тырыштым”. Урал пәйғәмбәр үҙенең холоҡ-фиғеленә, ҡылған ғәмәлдәренә баһа бирә алырҙай үҙаллы шәхес:

Яу тупларҙай еремдә талай илем бар ине,
Ҡулдаш булыр илемдә батыр ирҙәр бар ине,
Шулар ҡәҙерен белмәнем...

Ә бына Урал пәйғәмбәрҙең васыяты Тәүраттә Нух пәйғәмбәргә бирелгән нәсихәттәргә, Муса ҡәүеменә тәғәйенләнгән ҡанундар бәйләмәһенә тиң булған ҡиммәттәрҙе тәкрарлап, гүзәл телебеҙҙә мөлдөрәмә килеш тәүбулмышын һаҡлаған:

“Яуызға юлдаш булмағыҙ, кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ! Уландарым, һеҙгә әйтәм: Мин әрсегән еремдә кешегә байман табығыҙ. Яуҙа булһа, баш булып, кешегә ил ҡороғоҙ, данлы батыр булығыҙ... Барығыҙға шуны әйтәм: Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ! Яманға юл ҡуймағыҙ, яҡшынан баш тартмағыҙ!”

Исламдың “Уммуль Ҡитаб”ын асып ебәргән ете бөйөк аяттың “Иһдинәә әс Сыйрат әл Мөстәҡим...” кәлимәһенә Урал батыр пәйғәмбәрҙең дә васыяттарының рухы һалынып, ер йөҙөндә тереклек ҡылыр өсөн яралтылмыш әҙәми заттың берҙән-бер Аллаһына ялбарған доғаһы үҙ телебеҙҙә: “Беҙҙе тура юлдан алып бар, Үҙең ниғмәтләндергәндәрҙең юлынан — Һинең асыуыңа тарығандар һәм аҙашҡандар юлынан түгел!”

“Урал батыр” эпосының беҙҙең быуындарға килеп тоташыуы, бер яҡтан, халыҡтың үҙенең ҡаҙанышы булһа, икенсе яҡлап Аллаһ ҡөҙрәтенән башҡа булмаған, әлбиттә. Нисәмә быуын әүлиәләрҙең хәтерендә һаҡланған ул ҡомартҡы. Ошо тарафта “Иҙеүкәй һәм Мораҙым” иртәге күп нәмәләрҙе аңларға ярҙам итә.

Төкләҫ бабаның реаль шәхес булыуы шәжәрәләрҙә тәкрарлана, ә ошо шәхестең тоҡомдары менән бәйләнешле Мең ырыуы тарихнамәһе булған был иртәк бик күп хәлдәрҙе һөйләй. Шул уҡ ваҡытта башҡорт илендә киң таралған Иҙеүкәй хикәйәттәре менән “Урал батыр” эпосының ниндәйҙер генетик

бәйләнешен өйрәнгән һайын нығыраҡ тояһың. Хатта шундай фекер тыуа: Иҙеүкәй ҡобайыры менән бер бәйләнештә "Урал батыр"ҙың ҡиммәте тағы ла күтәреләһымаҡ. Меңәр йылға һуҙылған тарих теҙмәләренең логик бәйләнеше тойомлана башлай, бигерәк тә һөйләнелгән мөһим әхүәлдәрҙең Ҡөрьән-Кәрим һәм Инжил хикәйәттәре менән тап килеүе ошо сығанаҡтарҙың бөтәһе лә дөйөм кешелектең бер бөтөн тәҡдирен һыйҙырған һандыҡ булып күренә.

Төкләҫ бабаның әүлиәлек сифаты менән Урал пәйғәмбәр тереклеге араһындағы уртаҡлыҡ иртәк тексынан күренеп үк тора. Төкләҫ баба үҙенең Урал батыр тоҡомо икәнен белеп-танып, Уралдан ҡалған (хәҙергә мифик тип атайыҡ) ҡомартҡыларҙың эпик ҡиммәтен баһалай алған шәхес булып һынлана.

Йәнә Инжилгә мөрәжәғәт итәбеҙ. Һыу туфанынан арынып иҫән ҡалған Нух пәйғәмбәр тоҡомдары башҡорт шәжәрәләрендә лә, Инжилдә лә бермә-бер тура килә. Шәжәрә яҙа: "У Ноя после потопа остались три сына: Сим, Иафет, Хам. Сим — это род пророков. Хам — род евреев и род мусульман. Иафет — это род безбожников, яджузов и маджузов" (Башкирские шежере. 2002 г. Уфа).

Нух пәйғәмбәрҙең исем-шәрифен һыҙыҡ аҫтына алып шуны билдәләйек, бөгөн тыуған башҡорт балалары ла ошо матур исемде йөрөтә лә баһа.

Сим исеме лә Урал илендә таныш исем. Ағиҙелдең күп һыулы уң яҡ ҡушылдығының исеме Эҫем (Сим) йылғаһы. Ошо уҡ тарафтарҙа мәшһүр Шүлгән мәмерйәһен, Арҡайым ҡаласығын beләбеҙ, логика тағы ла Ҡөрьән-Кәримдәге Әр Раҡим атамаһына алып бара ла, "Мәмерйә" сүрәһендә ошо ике атама бер бәйләнештә килтерелгән икән, Ҡөрьәндәге был хикәйәт Урал иленә — Арҡайымға алып бармаймы, тигән фекерҙе уята. Хатта мәмерйәләрҙең координаттары билдәләнә һымаҡ: "Һин Ҡояшты күрәһең бит,ҡалҡҡан ваҡытта мәмерйәләрҙең уң яғына ауышты, ә байығанда һул яҡҡа үтте..." (18-се сүрә, 17-се аят). Әгәр шәжәрәләр айырым пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр тоҡомон айырып күрһәтә икән, был садиҡ әхүәл булған, һәм ошо фараҙды үҙебеҙҙең иртәктәрҙә күрергә була. Төкләҫ баба үҙе өс быуын әүлиәләр тоҡомонан сығып, йәш килеш вафат була, әммә үҙ ғилемен улына өйрәтеүе әйтелә. Әүлиәлек Аллаһ Тәғәлә биргән хикмәт, ә уланына Төкләҫ баба Урал пәйғәмбәр хаҡында мираҫ тапшырып, уның ошо мираҫҡа лайыҡ шәхес икәнен дә таныта алған, һис шикһеҙ. Беҙ бөгөн аңлай алмаҫлыҡ ниндәйҙер бер хикмәт Иҙеүкәйгә лә үҙен баһаларға нигеҙ биргән. Быны төшөнөр өсөн тик бер генә садиҡ юл бар — ул Иҙеүкәйҙең үҙенең дә әүлиәлек сифаты һәм үҙенең сығыш тамырҙарын ифрат аныҡ белеүе. Иртәктән аңлашылғанса, Иҙеүкәйҙең оло бабаларынан берәүгә лә ошо исем ҡушылған була: "Илгә килгән дошманды Ағиҙелдәй быуһын тип, уланына атыны Иҙеүкәй тип ҡуйҙы, ти". Тимәк, был исемдең тамырҙары ифрат тәрәндә ята һәм ниндәй бөйөк ватансылыҡ рухы һалынған уға. Мәмерйәлә һаҡланған серле һандыҡта Иҙеүкәйҙең шәжәрәһе менән бер рәттән Төкләҫ бабаның Иҙеүкәйгә бағышламаһы ла яҙылған була. Беҙҙең бөгөнгө тел менән әйткәндә, эстафета бер туҡтауһыҙ тапшырыла килгән. Ниндәй матур метафора менән бирелгән иртәктә Төкләҫ хатнамәһе: "Үмәр батырҙан ҡалған булатымды тотһа ул, ниндәй яуҙар килһә лә — бөтәһенә айҡар ул. Уралдан дейеүҙе ҡыуған Урал батыр ҡәберен эҙләп барып тапһа ул, уның торҡаһын кейеп, Шүлгәндән сыҡҡан йылҡынан ҡоланы һайлап менһә ул, ни теләһә — шуны эшләр, Уралда ҡашҡа булыр ул!"

Иҙеүкәҙең иң аҫыл сифаттарының береһе — үҙенең ҡеүәтле, илһөйәр көсө ташып торған Батыр булыуын тойоу ҡеүәһе. Был сифаттар уның ғүмере менән

иҫбатлана. Әгәр ул ошондай батыр булмаһа, уның тураһында төрки халыҡтарҙа ифрат киң таралған ҡобайырҙар, иртәктәр ҡалмаҫ ине.

Тәбиғи ғилемлелек, әүлиәлек сифаттары улы Мораҙымда ла тойомлана. Мораҙым телмәрендә лә шул уҡ тарихи мираҫты тапшырыу ғәләмәте һиҙелеп тора: “Мин, мин, килдем, мин килдем! Уралыма, илемә мал тултырам, тип килдем”.

“Урал батыр” эпосын барлап, Инжил менән сағыштырыуҙы дауам итәбеҙ. Бытие, гл.9, стих 4: “И благословил Бог Ноя и сынов его и сказал им: ...только плоти с душою ее, с кровью ее, не ешьте”.

Икенсе урында: Левит. гл.17, стих 12. “Ни одна душа из вас не должна есть крови...”

Эпоста: “Бала үҫеп еткәнсе, үҙе йәнлек тотҡансы, һыуһынға ҡан эсеүҙән, баш-йөрәкте ашауҙан уландарын тыйғандар, һис ярамай, тигәндәр”.

Бер үк васыяттар — Муса ҡәүеменә лә, Нух ҡәүеменә лә, Урал ҡәүеменә лә. Хайуани халәттән айырылып, әҙәми зат булып йәшәй башлаған үҙенең ижад емешенә Аллаһ Тәғәләнең иң әүәлге, иң баштағы тыйыуҙары булған был.

“Урал батыр” эпосында тылсымлы таяҡ мөғжизәһе эҙмә-эҙлекле һүрәтләнә. Шүлгән дә, Урал үҙе лә таяҡ ярҙамында ҡәҙимге кеше күҙлегенән мөмкин булмай торған эштәр башҡара, тик маҡсаттары уларҙың ҡапма-ҡаршы була, әлбиттә. “Урал юлға сыҡҡан, ти. Таяҡ алып киткән, ти. Таяғын ат иткән, ти”. Сюжет барышында Айһылыуҙы Һомай янына алып ҡайтыр өсөн “таяғы мән арбаған, икәүләшеп әлеге бер таяҡҡа менгәндәр, былар юлға сыҡҡандар”.

Мөғжизәле таяҡтың көсөн белгән Шүлгән иһә уны яуыз ниәттә файҙаланырға уйлай: “Самрауға яу асайыҡ, Аҡбуҙатын алайыҡ, беребеҙ таяҡ тотайыҡ, беребеҙ Аҡбуҙ менәйек, бөтә илдә баш булып барыһыны мат ҡорап, көслө батша булайыҡ. Һин таяғың бир миңә, ошо илде емерәйем...” Ике туған көс һынашып, Урал үҙенең батырлығын күрһәткәс, Шүлгән йәнә үҙ теләген тылҡый бирә: “Мин дә бер дан табайым, Әзрәҡәғә барайым, илен баҫып алайым, — тип таяҡ һораған, Урал таяҡты биргән... Шүлгән таяҡ алғас та... таяҡты бер һуҡҡан да, барын һыуҙан баҫтырған...” Мөғжизәле таяҡтың яҙмышын Урал үҙе хәл итә: “Ҡаты айбарын һалып, Урал таяҡҡа сапҡан, таяҡ киткән сәсерәп...”

Шундай уҡ серле таяҡ мөғжизәләре Тәүраттә лә, Ҡөрьәндә лә сағылыш таба. Муса пәйғәмбәрҙең таяғы Аллаһ Тәғәлә хикмәте менән йыланға әүерелә, таяҡ тылсымы менән Муса диңгеҙ ярып, үҙ ҡәүемен фирғәүен ғәскәренән ҡотҡара. Таяҡтың йәнә бер мөғжизәһе Ҡөрьән-Кәримдәге аятта һүрәтләнә: “Һәм бына бер ваҡыт Муса үҙ халҡына һыу һораны һәм беҙ: “Таяғың менән ташҡа һуҡ”, — тинек. Ул таштан ун ике шишмә урғылып сыҡты һәм бар кешеләр эсә торған урындарын белделәр...” (2-се сүрә, 60-сы аят. Өҫтә күрһәтелгән тәржемә). Ошо уҡ хәл Тәүраттә лә килтерелә. Бына шулай, кешелектең рухийәт нигеҙен тәшкил иткән изге китаптар рәтенә ҡуйып була беҙҙең эпостарыбыҙҙы. Бөгөн беҙ уларҙың ҡиммәтен beләбеҙме, үҙебеҙҙе ошо ҡиммәттәрҙең мираҫсыһы һәм дауамсыһы итеп, тыйылғандарҙан тыйылып йәшәй беләбеҙме — юҡмы, тип кем генә оран һалһа ла, был оран сүллектә аҡырып йөрөгән кешенең ауазы булып юғалып ҡалыуы мөмкин, әммә ләкин Әҙәми заттың зәһәр аҡылы ниндәй генә тәғлимәттәр уйлап сығарһа ла, уның йәшәйешен Ҡиәмәт көнөнә тиклем һуғара алырлыҡ, Форҡан тәғәйенләгән фәҡәт бер тәғлимәт, фәҡәт бер генә садиҡ юл — тыйылғандарҙан тыйылыу юлы ғына бар.